# Башҡорт дәүләт теленән диктанттар
# (демоверсия)

## 5 класс

### Контроль күсереп яҙыу

### Көҙ етте.

Һалҡын ел иҫте. Әсе ел ыжғыра. Беҙҙең йылға буйындағы ҡарт тирәктәр, ҡыуаҡлыҡтар яланғасланып ҡалды. Аяҡ аҫтында ағастарҙан ҡойолған һары япраҡтар ҡыштырлай. Йылға тоноп ҡалған.

Ҡоштар йылы яҡтарға осоп киттеләр.Урмандарҙа, ҡырҙарҙа тынлыҡ урынлашты. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар ғына ҡалды. Йылғаларҙа, күлдәрҙә ҡаҙҙар һәм өйрәктәр генә ҡойоналар.

### Контроль диктант.

### Тейен нисек ҡышлай?

Ҡышҡы һыуыҡтар һәм бурандарҙа тейен ояһына йәшеренә.Ул ояһын ағас ҡыуышына яһай. Ояла йомшаҡ,йылы була. Инеү өсөн ҡалдырылған тишекте тейен эстән ҡаплап ҡуя. Тышта ел ыжғыра,буран олой.Тейен рәхәтләнеп йоҡлай бирә.Буран туктағас,ағастан ағасҡа һикереп аҙыҡ эҙләй. Ҡышҡы аҙыҡты тейен көҙҙөн әҙерләй.Ағас ҡыуышына бәшмәктәр,сәтләүектәр ташый. Тейен шуларҙы табып ашай.

### Контроль диктант

### Яҙ көнө

Яҙ көнө беҙ Ҡаратау урманына экскурсияға барҙыҡ. Ҡаратау шишмәһе буйында йүкә,ҡарама,уҫаҡ ағастары үҫә.Ҡаратау итәген һылыу ҡайындар биҙәй. Тауға күтәрелгән һайын имән,ҡарағай ағастары арта бара. Урманда ҡар күп әле.Ләкин ағастар бөрөләнгән инде.Тиҙҙән япраҡ ярасаҡтар.Беҙ ағастарға ҡарап,төньяҡты һәм көньяҡты табырға өйрәндек.(50 һүҙ)

## 6 класс

### Контроль диктант

### Ноябрь.

Ноябрь –көҙҙөң һуңғы айы. Иртәнсәк һәм кистәрен бик һыуыҡ була. Көслө елдәр иҫә. Ел ағастарҙың һуңғы япраҡтарын ҡоя. Күлдәр һәм быуалар боҙ менән ҡаплана.
Ноябрҙә һуңғы өйрәктәр көньяҡҡа китеп бөтә.Баҡсаларҙа, өй тирәләрендә ҡыҙылтүштәр күбәйә.Улар миләш емештәре менән туклананалар. Ноябрь аҙағында баҫыуҙарҙы, яландарҙы ҡар ҡаплай. Ҡоштарға ем табыуы ауырлаша.

### Контроль диктант

### Тейен нисек ҡышлай?

Ҡышҡы һыуыҡтар һәм бурандарҙа тейен ояһына йәшеренә.Ул ояһын ағас ҡыуышына яһай. Ояла йомшаҡ,йылы була.Инеү өсөн ҡалдырылған тишекте тейен эстән ҡаплап ҡуя.Тышта ел ыжғыра,буран олой.Тейен рәхәтләнеп йоҡлай бирә.
Буран туктағас,ағастан ағасҡа һикереп аҙыҡ эҙләй.Ҡышҡы аҙыҡты тейен көҙҙөн әҙерләй.Ағас ҡыуышына бәшмәктәр, сәтләүектәр ташый. Тейен шуларҙы табып ашай.

**Контроль диктант**

**Урманда янғын.**

Июлдә эҫе көндәр башлана. Йылы ямғырҙар яуа. Ләкин йәшенле ямғырҙар ҡайһы ваҡыт бәлә лә килтерә. Йәшен һуғыуҙан ҡарағай, ҡарағас һәм башҡа бейек ағастар тоҡанып китәләр. Урманда янғын бик ҡурҡыныс. Утта йәш үҫемлектәр, еләклектәр, ҡош, йәнлек оялары юҡҡа сыға. Ас ҡалған йәнлектәр күпләп һәләк булалар. Халыҡ хужалығына ҙур зыян килә.

**7 класс**

**Контроль диктант**

**Октябрь.**

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Иртәнге һыуыҡтар көсәйә төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалҡынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала.

**Контроль диктант**

**Матурлыҡ.**

Кешенең эске һәм тышҡы матурлығы була.Әммә уның нигеҙендә сәләмәтлек ята. Шуға ла йәштән үк гигиена талаптарын теүәл үтәргә кәрәк. Һәр иртәне гимнастиканан башлау,һалҡын һыу менән йыуыныу,тәнде ҡаты таҫтамал менән ышҡыу көндәлек ҡағиҙәгә әйләнергә тейеш.Ундай кеше грипп ,ангина менән ауырымай,эшкә һәләтлеге арта,кәйефе лә була.

Битеңде генә түгел,муйынынды ла,ҡолаҡтаҙы ла һабынлап йыуырға онотоорға ярамай.Мәктәптән ҡайтып,урамда уйнап кергәс,ҡулдарҙы һабынлап йыйырға кәрәк.Был кешенең тәрбиәлелеген күрһәтә. Тештәр тураһында айырым әйтергә мөмкин. Тештәрҙе иртәле-кисле һәм ашағандан һуң паста йәки порошок менән ентекләп таҙартырға кәрәк.

**Контроль диктант**

**Талҡаҫ күле.**

Юлдаш менән Ҡыҙырас аяҡтарын күлдең йомшаҡ ҡомона батырып,оҙаҡ ултырҙылар.Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.Иртәнге һауала тауыш көслө яңғырай.Унда,Һаҡмар буйында,трактор геүләй.Һулда комбайн шаулай.Алыҫта йәштәрҙең йырлаған,көлгән тауыштары ишетелә.Оло юлдан иген,мәғдән тейәгән машиналар өҙлөкһөҙ үтә.Бейектә самолет күренә.Ул Өфөнән Баймаҡҡа почта килтерә.

Ә бында Талҡаҫ күле. Ул тып-тын ята.Күлдең уртаһында,күкһел томан эсендә, Уртаташ күренә.

**8 класс**

**Контроль диктант**

**Бал.**

Боронғо Грецияның атаҡлы математигы Пифагор балдың кеше ғүмерен оҙайтыуы тураһында яҙып сыҡҡан.Үҙе лә балды йыш ашаған һәм 90 йәшкә тиклем йәшәгән.

Шулай уҡ боронғо грек философы Демокрит та 100 йылдан артыҡ йәшәгән.Ул да балдың сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуын әйткән.Атаҡлы табип Әбуғалисина йәшлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән.

Юҡҡа ғына әйтелгән һүҙҙәр түгел былар.Балда 60-ҡа яҡын төрлө матдә бар.Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп.Ә улар-йөрәк мускулдарының нормаль эшләүе өсөн бик кәрәк матдәләр.

**Контроль диктант.**
**Июнь айы.**

Июнь-йылдың иң матур айы. Болон ,туғайҙар гөрләп сәскә ата.Был айҙа Өфө ҡалаһына яҡын аҡландарҙа ҡырҡтан ашыу сәскә төрөн күрергә мөмкин. Йылға,күлдәр өҫтөн ап-аҡ һәм һап-һары томбойоҡ сәскәләре ҡаплай. Май,июнь-ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты.Улар балаларына ашарға ташып бер була.Мәҫәлән,бәләкәй генә себен сәпсеге тәүлегенә 560 тапҡыр осоп,аҙыҡ килтерә.

Июндә күбәләктәр оса.Бал ҡорто күс айыра. Июнь-тәүге еләктәр айы.Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә. 22 июнь-йыл эсендә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн.